ПУБЛИЦИСТИКА

*Марсель ҠОТЛОҒӘЛЛӘМОВ*

# Һыу ташҡанда балыҡ тәкәббер була

*Тау билгеһе таш булыр,*
*Бай билгеһе аш булыр.*
*Аҙъан илдең билгеһе —*
*Бер-береһенә хас булыр.*

Быйылғы ғинуарҙа, ыҙғар айҙа, йәй шәйләмәгән йәйғорҙо тамаша ҡылғайныҡ. Шул уҡ һыуығайҙа Өфө урамдары буйлап ифрат буръяҡ ҡар һыуҙары шарлап аҡты. Ҡыш тип тормай баҡса юлын тапаусылар ҡарағат ҡыуаҡтарының бөрө ярып ултырыуын ҡайтып һөйләне. Уның ҡарауы, ауылдағы йортобоҙ янындағы өс сыйырсыҡ ояһы ла эйәләрен мөҙҙәтендә тәки көтөп ала алманы. Уларҙа беҙ өҙөлөп һағынған ҡошсоҡтар урынына әрһеҙ турғайҙар йоморҡа баҫты.

Үҙгәрештәр заманы... Һынылыштар ваҡыты... Был ғәләмәт ел-дауылға ла, тереклеккә лә, хатта асманды айҡар ай-ҡояшҡа ла ҡағыла, имеш. Мостай ағай: «Туп-тура тиһәң, сыбалып китеп, /Юлдар аҙаша;/ Ҡай тарафҡа барырға ла белмәй, /Йылдар аҙаша;/ Үҙ ерендә, ай-ҡояшһыҙ ҡалып, / Илдәр аҙаша», — тип буталсыҡлыҡ фәлсәфәһен шиғри юлдарға һалғайны. Әммә һәр тырым-тырағайҙың да үҙенә күрә логикаһы, кемдер көйләп торған тәртибе барҙыр.

Тормошобоҙҙағы һәммә бәләләрҙең башын ил эсендә йә Горбачевтан, йә булмаһа Чубайстан эҙләйбеҙ. Иғтибарыбыҙҙы ситкәрәк, алыҫҡараҡ йүнәлтһәк, хәҙер ҡарғыштың иң ҡәһәтлеһе Америкаға төбәлә. Теге ике эшмәкәрҙең ғәм алдындағы ғәйебе нимәнән ғибәрәттер, ул мәсьәлә бигүк уйландырмай ҙа, Чубайс виноват и вәссәләм. Ҡушма Штаттарҙа Франклин Рузвельттан аҙаҡ та илебеҙҙе ситкә типмәгән президенттар булғандыр. Американдар ете иләк аша үткәреп, күрәләтә һантый кешене ил башына һайламаҫ. Унда Аҡ йортҡа хужа булып ингән бере, йәнә лә океан аша Рәсәйгә ҡарап, теш ыржайтып ултырмайҙыр ҙа инде. Ләкин ике социаль ҡоролош, ике идеология, ике төрлө маҡсаттар тигән фекерләү стереотибы аңыбыҙҙан һис юйылаһы түгел.

Ил башындағы хакимдарҙың, йомро баш дипломаттарҙың, улар ауыҙынан сыҡҡан һәр һүҙҙе фаразлау бизмәненә һалып тороусы сәйәси күҙәтеүселәрҙең бөгөн бер хәбәр һөйләүенә, иртәгәһенә икенсе юрауға ышандырырға тырышыуына ҡарағанда, донъяла булып ятҡан ваҡиғаларҙың логикаһын, сәбәбен һәм ихтимал һөҙөмтәһен һис кем дә күҙ алдына аныҡ ҡына килтермәй ҙә, уларҙы аңлата ла алмай, шикелле. Француз әҙибе, фәйләсүфе һәм тарихсыһы Вольтер әйтмешләй, һәр ваҡыт тиерлек, беҙ ваҡиғалар менән идара итә алмайбыҙ, әммә

улар беҙҙе үҙ артынан эйәртә. Ысындан да, әллә көндәлек көнитмеш мәшәҡәттәре күмеп китте, йәиһә беҙҙең ихтыярҙан ҡеүәтлерәк яҙмыш ағышы үҙ яйына алып киттеме, иллә мин-мин тигән хакимдар һәм байҙар ҙа бөгөнгөнөң асылын һәм иртәгәһе көндө баһалай һәм уға йоғонто яһай алмаҫ хәлгә еттек.

Рус әкиәттәрендә мажара эҙләп йә хаҡлыҡ юллап йөрөүсе мосафир, өс юл сатында ятҡан ташҡа барып төртөлөп, ундағы: «Уңға киттеңме — уңаһың, һулға тайшандыңмы — туңаһың, тәңгәл һуҡтырҙыңмы — башыңды юғалтаһың», — һымағыраҡ яҙыуҙы уҡый ҙа хәтһеҙ ваҡыт, нимәгә тәүәккәлләргә белмәй, елкәһен ҡашып тора бит. Әммә әкиәттә ул мосафирҙың аңының ни мөғжизә менәндер яҡтырып китеүе һәр ваҡыт тиерлек уға тоғро әмәлгә ишара яһай һәм уның сәфәре лә уңышлы тамамлана, донъяға ла һиллек-муллыҡ килә. Әкиәттәр, ғөмүмән, балалар зиһененә йүнәлтелгән тип уйлаһаҡ та, уларҙың төпкөл асылы өлкәндәр тормошона нигеҙләнгән. Риүәйәттәрҙән тарихтың бер сағылышын табабыҙ. Имештер, йәһүдтәр бәйғәмбәре Муса (Моисей) үҙ ҡәүемен, Мысырҙан хәҙерге Фәләстан ере Ханаанға алып сығыу өсөн, сүллек аша ҡырҡ көн йөрөткән һәм халҡы алдында мөҡәддәс бурысын үтәгән. Уйлап ҡарағанда, Рәсәй халҡы бөгөн баяғы әйтелгән мифик таш алдына барып баҫманымы ни? Ҡайһы яҡҡа юл тоторға? Юлды һайлағанда аҡылға таянырғамы, әллә хискә буйһонорғамы? Ел-дауылдар бермә-бер аяуһыҙлана барған заманда халыҡты шырлыҡ һәм томандар, ғәрәсәттәр һәм ҡазалар аша алып сығырҙай абруйлы ла, зирәк тә, тәүәккәл дә юлбашсылар арабыҙҙан табылырмы? Был, бәлки, риторик һорауҙыр, ләкин илдәге һәр тарафтағы башбаштаҡлыҡты күрә йөрөй торғас, ул һәммәбеҙҙең дә күңелендә булһа, ғәжәп түгел.

Хәҙерге мажаралы әҙәбиәттә Василий Головачев — яҡшы билдәле исем. Уның «Ҡәбәхәттәр ваҡыты» тигән романы илдә законһыҙлыҡтың, криминаль мөхиттең дәүләт власы менән бергә олғашыуының тантана итеүен һүрәтләһә, «Разборки третьего уровня» тип аталған детектив романда, йәмғиәттәге ғәҙелһеҙлекте күрә йөрөгән яңғыҙ һуғышсы, прокуратура, суд, махсус хеҙмәттәр, армия, дәүләт органдарының ярҙамынан ваз кисеп, енәйәтсел ошо системаға ҡаршы көрәшкә үҙе генә сығырға мәжбүр була. Был, әлбиттә, фантастикаға тартым, әммә илдә криминалдың еңә барыуына шаһит булған ябай уҡыусы автор хыялын ысынбарлыҡҡа алырға әҙер.

Ошолай уҫал һәм өмөтһеҙ һығымталарға килергә беҙҙе нимәләр мәжбүр итә һуң әле? Телевидение, интернет, гәзиттәр, бүтән төрлө мәғлүмәт сығанаҡтары, дөйөмләштереп алғанда, йәмғиәттең һәм, ғөмүмән, дәүләт механизмының быуманан тартышҡан кеше хәлендә булыуын аңғарта килә. Бары шуныһы, ошо сиргә диагноз ҡуйыусылар бар, ләкин дауалауҙы ойошторорға теләүселәр генә юҡ. Бындай шарттарҙа йәмғиәттә көсөргәнеш хәүефле кимәлгә яҡынайып туплана һәм «Разборки третьего уровня» әҫәрендәге ганфайтер Матвей Соболев кеүек шәхсән көрәшселәрҙең законлылыҡ өсөн эш итә башлауынан Хоҙай аралаһын. Илдә ябай кешене яҡлаусы һәм һаҡлаусы бер генә көс — закон һәм уның кәүҙәләнеше — дәүләт кенә булырға тейеш.

Шулай тип раҫлайбыҙ, ләкин тормош ысынбарлығы бының киреһен тәкрарлай килә. Кеше хоҡуҡтары тураһында һөрән көсәйгән һайын, ул кеше үҙе кесерәйә бара һәм уның тауышы күптән инде һүҙ буҡаһында сәсәп тонсоҡто. Күңелде ҡағыр ябай фекер форумдар, конференциялар, резолюциялар, мөрәжәғәтнамәләр

теленә күсте. Ни ҡәҙәре генә матур һөйләһәк тә, президиумдағы түрәләр менән залдағылар араһы яҡынайманы. Залға инеүҙән мәхрүм ҡалғандар тураһында инде әйтеп тораһы ла түгел.

Ябай кеше менән дәүләт хеҙмәткәрҙәре араһындағы алыҫлыҡ шул дәрәжәгә етте ки, улар хәҙер, бер үк илдә йәшәһәләр ҙә, төрлө донъя кешеләре һымаҡ. Уларҙың телдәре лә бүтәнсә, фекерләүҙәре, зауығы, маҡсаттары, хатта килеш-килбәттәре лә башҡаса һәм ошо социаль төркөмдәрҙең яҡынайыу ихтималы әлегә төҫмөрләнмәй.

Ҡулында хакимлыҡтың осмото ғына булған кешеләр ҙә фәҡәт бер-береһе менән генә аралаша һәм хәҙер Рәсәйҙә иген үҫтергән, балалар уҡытҡан, сырхауҙарҙы шифалаған хеҙмәт кешеләре элитаһына алмашҡа ҡағыҙ ҡыштырлатҡан, хәбәр һөйләгән, етәкселекте һөнәр иткән чиновниктар һәм депутаттар кастаһы хасил булды. Уларҙың көндәлек шөғөлө халыҡ өсөн ябыҡ, әммә дәүләт хеҙмәтендә тип иҫәпләнгәндәрҙең эшмәкәрлеге һөҙөмтәһе илдең иҡтисади яҡтан тамам йөгөнөкләүендә, халыҡта өмөтһөҙлөктөң нығыныуында күренә. Шул уҡ ваҡытта юғары етәкселәр ауыҙынан эш менән нығытылмаған маҡтаныу көсәйҙе. Хәйер, ил тарихында маһайыу осорҙарын кисергәйнек инде. Оло дәрәжәле ил башлыҡтарының рухландырмаҫ дәртле һүҙҙәрен ишеткән һайын халыҡтың: «Кешнәгән айғырҙың өйөрөн күр, маҡтанған ирҙең өйөн күр», — тип әйткәне хәтергә килә. Кәпәренеүҙең күркәгә генә килешеүен онотоп ебәрәбеҙ шул.

Беҙгә асылыбыҙға ҡайтырға кәрәк. Аяуһыҙ донъяның ҡыҫымына бирелеп, үтә ваҡайландыҡ бит. Көндәлек ихтыяждарыбыҙҙы ла яҡлай алмай, яҙмышыбыҙға ҡул һелтәнек. Ошондай вайымһыҙлыҡ менән нимәгә өмөт итәбеҙ һуң? Етеш, рәхәт тормошто йылы кабинеттарҙа, йомшаҡ креслоларҙа ултырыусы ағайҙар бер кемгә лә кеҫәһенән сығарып бирмәҫ, ул хеҙмәт һәм йәнә хеҙмәт менән генә табыла. Хәйер, быны тәкрарлау зарурлығы ла юҡ бит. Ваҡ кеше булып, бахырланып, йәлләтеп йәшәмәйек. Донъяла көслөләр, мәртәбәлеләр, хәллеләр генә һанланған саҡта ҡеүәтле булыуға, етеш тормошҡа, рухи йәһәттән мөстәҡиллеккә ынтылыуҙың һис ғәйебе юҡ. Барыр юлыбыҙҙа үр осрай икән, уға кәртә рәүешендә түгел, бәлки бейеклек итеп ҡарайыҡ. Юғары күтәрелмәйенсә, донъялағы ҙурлыҡты ла, хурлыҡты ла самалай алмабыҙ.

Бына ошонда инде, форсаттан файҙаланып, тәрбиә, зыялылыҡ, яуаплылыҡ тураһында сиселеберәк һүҙ алып барһаҡ, бәлки, таман булыр.

Күренекле инглиз сәйәсмәне Уинстон Черчилль: «Мәктәптәге уҡытыусылар премьер-министрҙар хыял да итә алмаған власҡа эйә», — тип йыш ҡына әйтер булған. Тормош ошондай һүҙҙәрҙе раҫлай килһә икән.

Ҡыҫҡа ғына йәй үтер ҙә, әле сабыйлыҡтан сығырға ла өлгөрмәгән балаларыбыҙ, үҙҙәрен инде өлкәнгә һанаған үҫмерҙәр, осрашҡанда ҡанат ҡағышҡан ҡоштарҙай ҡыуанышып, класс бүлмәләренә, вуз аудиторияларына йәнә йыйылыр. Һәр йыл һайын ҡабатлана торған күренеш булһа ла, тиҫтерҙәрҙең осрашыуы — байрам, ғүмер юлында бер баҫҡыс. Улар, тормош тигән хәтәр сәфәрҙең алдында ғына торған балалар, үҙҙәрен ни ҡәҙәре лә ҡаты һынау көтөүе тураһында әлегә уйланмай. Йөрәкте алдан өҙгөләй башлауҙан да ҡояш байышы яғынан ҡалҡмаҫ, һыуҙар отороға аҡмаҫ. Донъя, йәшәү, бала тип, беҙ, өлкәндәр, янғас та әлегә етеп торор.

Сабый өсөн һәр көн, һәр аҙым үҙенә күрә асыш менән оҙатыла бара. Ғөмүмән, кешелектең мәғлүмәтле булып йәшәүе уның туҡтауһыҙ ҡыҙыҡһыныуҙары, өҙләкһеҙ эҙләнеүҙәре менән бәйләнгән. Телебеҙгә «әсәй», «атай» һүҙен тәбиғәт үҙе һалһа, артабан тормошто танып белеү ҙә беҙгә иң яҡын кешеләребеҙ аша бирелә.

Ҡемделер булһа әсәйең, атайың менән йәнәш ҡуйыу, бәлки, әҙәпһеҙлектер. Шулай ҙа һинең аңыңа, донъяға ҡарашыңа йоғонто яһаған, мәғлүмәт һәм белем мөхитенә алып инеүсе кешеләр араһында мөғәллимдәрең айырым урын биләй. Ғүмер юлында байтаҡ уҡытыусы осрай, хәтереңдә күп образдар тоноҡланһа ла, беренсе уҡытыусыңды ла, яҙмышыңды бороп ебәргән шәхестәрҙе лә күңелеңдә һәр ваҡыт һаҡлайһың.

Яҡташым һәм өлкән дуҫым, Рәсәй Фәндәр академияһының мөхбир ағзаһы, Башҡортостан Фәндәр академияһы академигы, күренекле математик һәм механик Марат ағай Илһамовтың һөйләгәндәрен йыш хәтергә төшөрәм. Уның олатаһы Илһам Тәхәүетдинов мулла булған. Атаһы Әҡсән Илһамов иһә тотош уҡытыусылар династияһын башлап ебәргән. Ошо ҡеүәтле ырыу вәкилдәре Әбйәлилдә әле лә һәр мәктәптә тиерлек эшләй. Әҡсән ағай ғүмерен яҡташтарына мәғрифәт биреүгә арнаған. Хәтерләүҙәренсә, әжәл менән осрашыр алдынан да ул: «Ярлыҡапҡа электр үттеме икән?» — тип һораған, ти. Үҙе китһә лә, тыуған ауылым яҡты ҡалһын, тип хәстәрләгәндер оло мөғәллим.

Әҡсән Илһамовтың оло улы, Шакир ағай, бер нисә йыл элек арабыҙҙан китте. Туҡһандан уҙғайны мөғәллим. «Ә беҙ бала саҡта, Шакир ағайыма көнләшеп, ул математиканы белә, ти торғайныҡ», — тип хәтерләй хәҙер Марат Әҡсән улы Илһамов. Үҙ сиратында, уның да шәкерттәре бихисап. Әммә ғалим йөрәгендә Өфө авиация институтында уҡытҡан мөғәллиме Ҡенәз Ғәли улы Ғәлимхановтың образын ҡәҙерләп һаҡлай. Дүртөйлө районының Мәҫкәү ауылында тыуып үҫеп, уҡытыусылыҡҡа уҡып, аҙаҡ диңгеҙсе, карап төҙөүсе булып киткән легендар кешенең яҙмышы тураһында ентекләберәк һөйләү форсаты, бәлки, булыр. 2019 йылдың ноябрендә уның тыуыуына йөҙ ҙә ун йыл тула. Академик Илһамов үҙ юлында осраған уҡытыусылар араһында ике кешене айырыуса яҡын күрә. Тәүгеһе — әлеге Ҡенәз Ғәлимханов, икенсеһе — Ҡазандағы ғилми етәксеһе, мәшһүр ғалим-механик Хәмит Мөштәри. Шул уҡ ваҡытта үҙең тиҫтәләрсә талантлыарҙың остазы булып та уҡытыусыларыңа ихтирамды саф көйө һаҡлар өсөн оло йөрәкле кеше булырға кәрәк.

Бер мәл миңә данлыҡлы геофизик, Европа геофизиктар йәмғиәтенең даими ағзаһы Наил ағай Юнысов үҙ уҡытыусыһы тураһында һоҡланып һөйләгәйне. 1942 йылда Стәрлебаш районының Тәтер-Арыҫлан мәктәбенә яңы директор ебәргәндәр. Әхмәт Сәлих улы Давыдовты ауыр контузиянан һуң өйгә ҡайтарғандар. Һуғышҡа ҡәҙәр ул Мәскәүҙәге ике татар мәктәбенең береһендә директор булып эшләгән. Һуғыш. Мәктәптәр ябылған, ә Давыдовты Башҡортостанға оҙатҡандар. Шулай, мөғәллим Стәрлебашҡа килеп юлыҡҡан. Мәскәү педагогия институтын тамамлаған Әхмәт Давыдов ул саҡта мәктәптә юғары белемле берҙән-бер уҡытыусы булған. Наил Ҡәбир улы мөғәллименең кешелеклеген әле лә хәтерләй. Урта мәктәпте тамамлап, Өфөгә уҡырға барырға йыйынғас, Давыдов уҡыусыларын оҙата киткән, дөйөм ятаҡҡа урынлаштырып, шунан һуң ғына ауылға кире әйләнгән.

Бала йәнле мөғәллимдәр элек кенә булғандыр, тип уйламайым. Сөнки мәктәптәргә эшкә ғафил күңелле кешеләр килмәй. Ғөмүмән, ауылдарҙа уҡытыусылар шул ауылдың бөгөнгө йәне итеп кенә түгел, бәлки уның йәшәүен-йәшәмәүен хәл итеүселәр булараҡ кәүҙәләнә. Күп кенә ауылдарҙа фермалар, сәнәғәт предприятиелары ябылған, белгестәр китеп бөткән саҡта ундағы зыялылыҡты һаҡлау бурысы уҡытыусылар иңендә генә ҡалып бара. Бөйөк Ватан һуғышынан алда, унан һуң беҙ ошо хәлде баштан үткәргәйнек инде, тарихтың шулай әйләнеп ҡайтыуы йәл.

Әбйәлилемдә элек-электән белемле кешеләргә айырыуса хөрмәт булған. Ауылыбыҙҙың кескенә мәктәбендә Усман Нияҙғолов исемле ағай яҡын-тирәлә беренселәрҙән булып 1907 йылда уҡ арифметика, рус теле, география кеүек донъяуи фәндәрҙе уҡыта башлаған. Мулла дәрәжәһен йөрөткән ошо мәғрифәтсе инҡилаптан һуң Тамъян-Ҡатай кантонының мәғариф бүлеген иң башлап етәкләгән. Миңә уның улы, РСФСР мәктәптәренең атҡаҙанған уҡытыусыһы Әҙип ағай Нияҙғоловты белеү бәхете тейҙе. Мөғәллим, һуғыштан ҡайтып килешләй поезд аҫтына эләгеп, ике аяғын тотошлай юғалтҡайны. Урамда инвалид коляскаһында, мәктәптә кәүҙәһен ике ҡулы менән һелтәп йөрөгән мөғәллим ағайҙы күреү, әлбиттә, йәл ине. Әммә ярты кәүҙәле генә ошо кешенең үҙен ниндәй мәртәбә менән тотоуына, рухи ҙурлығына әле булһа һоҡланам. Әҙип Усман улы менән бергә Асҡар урта мәктәбендә Мотаһар ағай Билалов эшләне. Ул атайым менән ауылдаш, фронтҡа ла бергә киткәндәр, бер үк часта һуғышып йөрөгәндәр. Шағир күңелле, хисле кеше, ауылынан сығып китешләй, Мотаһар ағай: «Сусаҡ тауың беҙгә һәйкәл булһын, иҫәнлектә әйләнеп ҡайтмаһаҡ», — тип әйткән тинеләр. Бәхеткә, яугирға имен-һау ҡайтыу насип булған. Ул да математика уҡытып, Мәскәүгә съездарға барып, РСФСР мәктәптәренең атҡаҙанған уҡытыусыһы булып ғүмер юлын тамамланы.

Асҡарҙа мине һәр ваҡыт тартып торған өй бар. Тау битләүенән үткән боронғо урамдарҙың береһендә Роза апай Сәйфиева йәшәне. Ул миңә Амангилде урта мәктәбендә рус теле һәм әҙәбиәтен уҡытты. «Миңә» тип әйтеүем шуға, сөнки апай кластағы ун һигеҙ бала араһынан миңә иғтибарҙы күберәк бүлә ине, шикелле. Һәр хәлдә, шулай тоя инем. Рус теленә, рус классик әҙәбиәтенә һөйөүем Роза апайҙан киләлер, тигән уйҙамын. Университетҡа имтихандарға китергә булғас, мөғәллимәм минең менән, отпускыһын сарыф итеп, ун көн әҙерлек үткәрҙе. Был көндәр, рус теле һәм әҙәбиәте дәрестәре булыуҙан бигерәк, әхлаҡ дәрестәре, мөғәллим юғарылығының өлгөһө булғандыр. Рәсәй Федерацияһының атҡаҙанған уҡытыусылары Роза Мотаһар ҡыҙы Сәйфиеваның, мине, урамда «трай» тибеп йөрөүсе үҫмерҙе, етәкләп, мәктәпкә кире ҡайтарған Әшрәф Мостафа улы Хәмзиндың шәкерте булыу — үҙе бер бәхет.

Ысын мөғәллимдең тормоштағы миссияһы класс бүлмәләрендә дәрес биреү менән генә сикләнмәй. Ул һәр ваҡыт халыҡтың уй-фекерҙәре менән, уға рухи юғарылыҡ өлгөһө күрһәтеп йәшәй. Дүртөйлөләге оло педагог Вил Ҡазыханов, минең ҡарашҡа, шундай кеше ине. Вил Суфиян улының белем биреү өлкәһендәге хеҙмәттәре шаҡтай билдәлелек алһа ла, йәмғиәттә тейешле дәрәжәлә баһаланып етмәй ҡалды. Уның тормошон, ижадын, яҙмышын бер ни ҡәҙәр белгән кеше булараҡ, халҡыбыҙҙың рухлы, саф намыҫлы улына хөрмәтемде еткереүҙе бурысым тип һанайым.

Сабып үтеп барған ғүмерҙе йүгәнләп-тышаулап туктатып торор әмәлдәр табылһа икән. Уҡыу башланыр мәл яҡынайған һайын үҙемде мәктәбебеҙ ишеге янында күрәм. Алтын приискылары хужалары Рәмиевтәрҙән мираҫҡа ҡалған бейек осормалы, ҡалай түбәле ошо дәү йорттарҙа минең һымаҡ хыялый нисәмә малай әлепте таяҡтан айырырға өйрәнде икән? Беренсе кластағы уҡытыусым — татар милләтле Хафаса өләсәйем — дәфтәргә таяҡтар һыҙҙыра башлауға алтмыш ете йыл үткән. Илебеҙҙәге халыҡтың күпселеге ул хәтлем йәшәмәй. Хәйер, ейән-ейәнсәрҙәрең университеттарҙа ҡайһылары — уҡып, бәғзеләре тамамлап уҡ өлгөргәс, ғүмер ебенең ни ҡәҙәр нәҙегәйеүен тоҫмалларға мөмкиндер инде.

«Ҡондовый» бүрәнәләрҙән буралған иҫке мәктәпте хәтерҙә яңыртыуҙан ни файҙа? Хәҙер ауыл ситендәгерәк бер ҡалҡыулыҡта таш мәктәп ҡуҡырайып ултыра. Алыҫтағы ошо мәктәпкә лә, бүтән меңдәрсә мәктәптәргә лә асманда әлегә йондоҙҙарҙы һәм ай менән ҡояшты ғына күргән балаларыбыҙ йөрөй.

Шөкөр, уларҙың аяғында, беҙҙеке кеүек, ҡуңалта ҡата, өҫтөндә ямаулы кейем түгел. Илебеҙ фәҡир, халыҡтың тормошо ауыр, тиһәк тә, әсә күкрәгенән кисә генә айырылған ҡыҙ һәм малайҙар ҙа галстуклы, затлы костюмдар кейгән, алҡа һәм сылбырҙар таҡҡан, кеҫәләрҙә — көйләп ятҡан телефондар. Биште унға ҡабатлайым тип, маңлай сирыштыраһы юҡ, сөнки һәр кемдең ҡул аҫтында — калькулятор. Балаларға хатта китап аҡтарырға ла түгел икән, улар өсөн Пушкинды, Мостай Кәримде, Хемингуэйҙы компьютер, интернет уҡый. Олоғайған кешегә үҙенән йәшерәк һәр кем матур, камил күренә. Класс бүлмәләрен, вуз аудиторияларын тултырып ултырған ошо сибәр, килеш-килбәте нәзәкәтле үҫмерҙәрҙең аңында, йөрәгендә ниҙәр барҙыр? Уларҙы ниндәй уй-хистәр дәртләндерә, һыҙландыра? Ғөмүмән, ихлас ҡыуанысҡа һәм яҡты донъяны томалаусы көйөнөскә әлеге йөрәктәрҙә урын бармы?

Мәктәп зыялы һәр кешенең күңелен ғүмер баҡый үҙенә тартып тороусы рухи ҡәғбә бит инде. Атайым, фронт үҙенә саҡырып алғансы, Темәс педагогия училищеһын ситтән тороп тамамлап, уҡытыусы булып эшләгән. Ҡырҡ икенсе йылдың йәйендә Харьков өсөн барған зәһәр алыштарҙа ғәйеп булған. Уның үҙенең ҡайҙалығын ғына түгел, ҡәберенең ни тарафтарҙа икәнлеген Украина далалары елдәре лә, Северский Донец тулҡындары ла ошоғаса әйтмәне. Ҡатынымдың атаһы, Магнитогорск металлургия комбинатын марганец мәғдәне менән тәьмин итешкән таусы, Орел өлкәһендә башын һалған. Хәҙер ул Зеленый Холм утары тирәһендә, бөйөк рус яҙыусыһы Иван Сергеевич Тургеневтың ата йорто Спасское-Лутовиновонан алыҫ түгел ята. Халҡыбыҙҙың йәнә: «Майҙанда йыҡҡан батырҙан яуҙа йыҡҡан батыр оло», — тигәне беҙҙең атайҙар тураһында булдымы икән?

Ул саҡ арба кендеге хәтлем генә булһам да, мин — һуғыштан еңеп ҡайтыусыларҙы ҡаршылаған малайҙарҙың береһе. Иҫән ҡалған һәр яугир килеп күренеү менән, моң-һағыш даръяһына тамам сумған ауылыбыҙ бер мәлгә яҡтырып ҡалғандай. Ә беҙ көтәбеҙ. Әсәйҙәр — эстән һыҙып, беҙ — кескенә йөрәктәребеҙҙе усҡа йомарлап, көтәбеҙ. Һәм ул көтөүҙәр мәңгелеккә һуҙылды.

Беренсе сентябрҙә, мәктәп тормошо гөж килгәс тә, тәүге дәресте Ҡаһарманлыҡҡа арнайҙар. Илебеҙҙәге байтаҡ һәйбәт нәмәләр кеүек үк, ошо изге эш тә формалләште. Бик өлкән йәштәге һуғыш ветерандары менән тормошта әле аҡты ҡаранан айыра алмаған бала-саға араһында уртаҡ фекер тойоу, минеңсә, ауырлаша бара.

Ололар күңелендәге ихласлыҡ балалар күңеленә инеп ята алмай. Бөйөк Ватан һуғышы фажиғәһе һәм ҡорбандары Мәскәү телевидениеһы каналдарында, матбуғатында кәмһетелеүгә дусар ителә. Ветерандар йәш, белемле, таҫма телле демагогтарға аргументлы ҡаршы тора алмай, уларҙы етди рәүештә тыңлаусылар ҙа бик һирәк. Халыҡтың: «Һандуғас күп йылды ҡарға дан тотор», — тип раҫлауы шулдыр инде.

Хәҙер хаслыҡ хаҡлыҡтан өҫтөн йөрөгән заман. Бурлыҡ булдыҡлылыҡ менән бер һаналған ваҡытта намыҫты саф көйө һаҡлау еңел түгел. Детектив әҙәбиәт, экрандарҙағы туҡтауһыҙ ҡан ҡойош, бандиттарҙы романтик юғарылыҡҡа күтәреү, әлбиттә, эҙһеҙ үтмәҫ. Улай ғына ла түгел, халҡыбыҙ йә ҡалабыҙ, йә ҡолайбыҙ тигән хәлдә тора. Ошо мәлдә йәштәштәребеҙҙең аңын башҡорттоң беренсе ғалим-геологы Ҡадир Тимерғәзиндың даһилығы, Заһир Исмәғилевтең илаһи моңдары, Мостай ижады балҡытып ебәрһә икән! Һәр кемдең баҡый иленә күсеүе кешелектең кире ҡайтмаҫ юғалтыуы булһа, сабыйҙың донъяға килеүе лә асманда йондоҙ ҡабыныу менән бер. Йөрәге янында әсә балаһын яҡты уйҙар, игелекле өмөттәр менән йөрөтә. Сабыйҙы иң таҙа, гәлсәр һыуҙа ғына ғөсөл ҡойондоралар. Был тәбиғи ғәмәлдә лә, бәлки, әйтелмәгән мәғәнә барҙыр, сөнки һәр кемдең сабыйы беҙҙең араға сафлығы, тапланмаған ниәттәре менән килә.

Һәм тормошто ошо сафлыҡ һәм ихласлыҡ менән үтеү өсөн ҙур аҡса ла, хакимлыҡ та, дәрәжәләр ҙә мотлаҡ түгел. «Мәктәп ябылмаһа, ауыл бөтмәҫ», — тигән һүҙ бар. Хәҡиҡәт был, әммә уның төбөндә ғәмәли тормош тыуҙырған әрнеү ҙә ята. Халыҡ борон-борондан төпләнеп йәшәгән урын ни өсөн ҡорорға тейеш? Уҙған быуаттың егерменсе-утыҙынсы йылдарында һәр ауылда мәктәп асыу, көллө кешене уҡырға-яҙырға өйрәтеү намыҫ эше һаналһа, бөгөн, «аҙ комплектлы мәктәптәр», «белем биреүгә сығымдарҙы оптималләштереү» кеүек һүҙбәйләнештәргә ышыҡланып, ауылдағы берҙән-бер зыялылыҡ йортоноң кәрәклеге лә шик аҫтына ҡуйыла.

Хәҙер хатта мәктәбебеҙ ҙә ғәҙәтләнгән мәктәп түгел, бәлки «белем биреү учреждениеһы». Учреждение... Ошо һалҡын төшөнсә мәктәптәребеҙҙән йылылыҡты алып киткән, уның мөғжизәле буяуҙарын төҫһөҙләндергән һымаҡ. Йәмғиәттә мөғәллимдәрҙең түбәнсел хәлдә ҡалыуы ла шул чиновниктарса бәғерһеҙлектән, рәхмәт тойғоһон юғалтыуҙан киләләр.

Ысындан да, ауыл кешеһе булғанғамы, тәрбиә системаһын мин баҫыу менән сағыштырам. Мәлендә һөрөп-тырматып, ашлап та ебәрһәң, артабан да яландан күҙ алмаһаң, уңышҡа иҫәп тоторға була. Ә инде һабан-тырма теймәгән, орлоҡ төшмәгән ерҙә нимә үҫерен беләһегеҙ. Совет сәйәси ҡоролошон хәтерҙән тиҙерәк юйып ташларға теләүселәр күп булһа ла, халыҡ мәғарифы өлкәһендә ул власть ифрат миһырбанлылыҡ күрһәткән. «Мәғариф» төшөнсәһе хәҙер иҫкергәнерәк тойолһа ла, ул үҙ эсенә белем биреү һәм тәрбиәләү комплексын ала. Инҡилаптан аҙаҡ йөҙҙәрсә мең бала, үҫмер урамда, ғәмәлдә ҡырағайлыҡ мөхитендә ҡалғанда, ил хужалығы хараба рәүешендә ятҡанда, власть бар ихтыярын, йәмғиәттә һаҡланып ҡалған миһырбанлылыҡты әлеге балаларҙы аслыҡ, енәйәтселек ҡулынан йолоп алып ҡалыуға биргән. Шуны ла онотмайыҡ: балалар яҙмышы хаҡында хәстәрлек ил өсөн ауыр шарттарҙа ла формаль кампания рәүешен алмаған, бәлки дәүләттең эҙмә-эҙлекле, даими сәйәсәте булып ғәмәлгә ашырылған. Был сәйәсәттең емештәре халыҡ хужалығын тиҙләтеп индустрия-

лаштырыу осоронда йәштәрҙең дөйөм дәрте, патриотизмы менән бер күренһә, ул Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында үҙенең иң юғары кәүҙәләнешен тапты. Мәктәп, йәмғиәт ул саҡтағы рәсми идеяға тоғро патриоттар ғына түгел, ә һәр йәһәттән аңлы, күп яҡлы белемле граждандар тәрбиәләй алған. Туҡһанынсы йылдарға тиклем Рәсәй йәмғиәте шул граждандлыҡ пафосына һәм фундаменталь тәрбиә һәм әхлаҡ ҡиммәттәренә таянып йәшәне. Беҙ хәҙер генә Рәсәй халҡын элегерәк тәрбиә алған зыялыларға һәм интернет-мәғлүмәтле йәштәргә айыра башланыҡ.

Тормош иптәшем ярты быуатҡа яҡын ғүмерен балалар уҡытыуға биргәс һәм үҙемдә лә мөғәллим ҡаны булғас, мәктәп тормошона, тәрбиә мәсьәләләренә һис ҡасан да битараф булманым. Әйткәндәй, яҙмышыма әүерелгән яҙыу-һыҙыу эше лә төп маҡсаты итеп кешене яҡшылыҡ өлгөләрендә тәрбиәләүҙе ҡуя бит. Бына шул белем биреү һәм йәштәрҙе тәрбиәләү, үҙенең кешелеклелек һәм миһырбанлылыҡ асылынан ситләшеп, сәйәсәттең бер элементына әүерелә бара һымаҡ. Совет осоронда булдырылып, һынауҙар аша үтеп, донъяла иң ипле, иң һөҙөмтәле тип танылған белем биреү системаһы дәүләт сәйәсәте концепцияһының үҙгәреү ҡорбаны булды. Элекке власты емереүселәр, коммунистик идеологияны ҡоротorға ынтылыу менән бергә, дәүләтселектең төп институттарының береһе булған белем-тәрбиә нигеҙҙәрен дә ҡаҡшатты.

Рәсәй халҡының борондан килгән традицияларын, ғаиләләге мөнәсәбәттәрҙе, милли менталитетты инҡар итеп, белем биреүҙә Көнбайыш стандарттарын механик рәүештә күсереү башланды. Хәйер, был процесс әле лә дауам итә, сөнки ул педагогик йәмәғәтселектең һүрелә барыусы ҡаршылығына, ата-әсәләрҙең ризаһыҙлығына осрай. Ғөмүмән, белем биреү өлкәһенә килгән һәр бер етәксе үҙенең «реформаторлыҡ» эшмәкәрлеген күрһәтергә тырыша. «Федераль компоненттар», «төбәк компоненттары» тип, уҡыу программаһын туҡтауһыҙ әүештәүеш килтереү, «Йыл уҡытыусыһы» кеүегерәк шоу-саралар уҡыусыларҙың белемен, мөғәллимдәрҙең һөнәри кимәлен күтәрмәй, бәлки нығынып та етмәгән аңды бутай, психикаһын имгәтә.

Тәжрибәле педагогтар, уйлай белгән ата-әсәләр бының нимәгә килтереү ихтималын аңлай, бары чиновниктарға ғына эксперименттар, реформалар, Берҙәм дәүләт имтихандары кәрәк. Иманым камил, белем биреү системаһы хәҙерге реформаларҙан йәнен алып сыға алған хәлдә лә, иртәгә тағы «реформаторҙар» табыласаҡ. Шунда ғына беҙ ниндәй хазинаны юғалтҡаныбыҙҙы аңларбыҙ.

«Ҡулың пак булһа, йөҙөң аҡ булыр, эшең хаҡ булһа, ғаиләң шат булыр». «Татыу булһа ҡатының, ары торһон алтының». «Яңғыҙҙың йәйәһе лә юғалыр, күмәктең уғы ла табылыр».

Ғаилә ҡороу һәм ғаилә тормошо һәр даим һәм бөтөн ҡәүемдәрҙә лә көнитмештең, ырыуыңды дауам итеүҙең, ғәмәлдә халыҡты ишәйтеүҙең, йәмғиәтте һәм дәүләтте нығытыуҙың ғәйәт мөһим кәүҙәләнеше булған, шул килеш ҡала ла. Ошо ябай ғына, шул уҡ ваҡытта тәрәнтен хәҡиҡәтте йөрәк аша үткәреү халыҡтарҙың бик күп риүәйәттәрендә, йырҙарында, әйтемдәрендә, ҡарһүҙҙәрендә сағылыш тапҡан. Республикабыҙҙа йәшәүсе башҡорттар, рустар, татарҙар, украиндар, белорустар һәм бүтән этник төркөмдәр, тәбиғи, был йәһәттән ситтә ҡалмаған. Алда килтерелгән әйтемдәргә йәнә иғтибар итһәгеҙ, уларға һалынған тормош фәлсәфәһенә, халыҡ педагогикаһы ҡағиҙәләренә үҙегеҙ

ҙә ышанырһығыҙ. Ғөмүмән, башҡорт бәйеттәре һәм легендалары, татар халыҡ йырҙары, рус былиналары, украиндарҙың мәрәкәле төртмә һүҙҙәре һ.б. балаға игелеклелек, киң күңеллелек, эш һөйөүсәнлек, Ватан өсөн үҙенде ҡорбан итергә аңлы рәүештә әҙер булыу төшөнсәләрен бирә.

Ошоноң менән халыҡтар уға шәхестәр булараҡ өлгөрөүгә генә түгел, бәлки үҙ милләтенең уланы һәм ҡыҙы булып үҫеүгә ярҙам итә. «Икенең береһе үлһә, береһе ҡалыр, яңғыҙҙың үҙе үлһә, кеме ҡалыр? Менгән аты, кейгән кейеме яуға ҡалыр». Уҡыусы теләк-әйтемдең фәлсәфәһен аңғарғандыр, тип ышанам, һәм был донъяға кеше булып аяҡ баҫҡан бер кем дә уға оторо тора алмаҫ.

Үҙ-ара мөғәмәлә һәм көнкүреш халыҡтың меңдәрсә йылдан килеүсе традицияларына таянған ғаилә ныҡлы тип иҫәпләнә һәм улар телдән аҙым һайын һибелмәй генә, тәбиғи йәшәү рәүеше булырға тейештер. Бигүк тәрән фәлсәфиәткә төшмәй һығымтаға килгәндә лә, кеше тормошоноң төп мәғәнәһе ырыуын дауам итеүгә ҡайтып ҡала тип раҫларға мөмкиндер.

Ғәм алдында улай тибеҙ ҙә ул... Хәйер, күпселек тә ошо фекерҙә инде. Һүҙ бәхәсһеҙ булғас, балаларыбыҙ ниңә упҡын менән ялҡын араһында сәбәләнә һуң? Мәрхәмәт белмәҫ үрт, бер яҡтан, бәпкәләребеҙҙең ныҡынып өлгөрмәгән ҡанаттарын көйҙөрһә, икенсе тарафтан — өйөрөлтөп сәсәтер, йотор, эҙһеҙ юғалтыр даръя. Беҙҙеке тип әйтергә тел әйләнмәгән йәмғиәт иһә сабыйҙарҙы һәр төрлө хәүефтәрҙең уртаһына ташлап, уларҙың йән әсеһе менән сәбәләнеүен ситтән генә күҙәтеп тороусы таш бәғер үгәйгә оҡшаған.

Тарих хәҡиҡәткә хыянат итмәһә, инҡилаптан, Бөйөк Ватан һуғышынан аҙаҡ халыҡта «детдом» тип кенә йөрөтөлгән балалар йорттары, ҡалалар, район үҙәктәре менән генә сикләнмәй, ҙур ауылдарҙа ла эшләгән. Ул осорҙар үҙемдең дә хәтерҙә. Бөгөн чиновниктар менән депутаттар, тау-тау ҡағыҙ яҙып, һүҙ йәлләмәй, етем ҡалған балаларҙы тәрбиәләү юлдарын һәм алымдарын эҙләп маташҡанда, әлеге йорттар тәнҡит утына эләгә. Минеңсә, ғәҙел түгел был, сөнки Ватан өсөн уның нисәмә гражданының ғүмерен һәм һәләтен нәҡ ошо йорттар һаҡлап алып ҡалған. Балалар яҙмышы тирәһендә ваҡыт-ваҡыты менән ҡутәрелә-һүрелә торған һүҙ ҡойоно мине һәр даим шикләндерә, сөнки беҙҙә эш йыш ҡына хәбәр һөйләү һәм ҡағыҙ ҡыштырлатыу менән алмаштырыла.

Һүҙҙе тәнҡиткә алып ултырһам да, йөҙҙәрсә мең баланың һис яҡшырмай торған аяныслы яҙмышына үҙем дә тош-тош әйләнеп ҡайтам. Йөрәккә ҡан һауҙыра торған был ғәмле тема, күрәһең, ҡәләм осонан да, телдән дә төшөп ҡалаһы түгел. Мәсьәлә шунда. Беҙ хәҙер хәҡиҡәттең күҙенә тура ҡарарға ла ҡыйыулыҡ итмәйбеҙ.

Балалар яҙмышын мин яҙмаларымда, әйткәнемсә, һәр даим күтәрә килдем. Йыш ҡына ҡабатлана торған факттарҙы хәтергә төшөрөп, йәрәхәттәргә тоҙ һибәһе килмәһә лә, ҡайһы берҙәре йөрәкте ярып сыҡҡандай. Рәсәй Балалар фонды президенты, яҙыусы Альберт Лихановтың әйтеүенсә, 2015 йылда Рәсәйҙә ике меңгә яҡын сабый һәләк булған.

«Уҙған йыл, — тип бәйән итә Альберт Анатольевич, — 1,2 миллион медицина аборты теркәлгән». Ғәмәлдә был да әҙәм балаһының йәнен ҡыйыу бит инде. Әсә-атаһының ҡулынан әжәлен тапҡан балалар күбәйә. Илдә йыл һайын 120 мең бала урамға ҡыуып сығарыла. Әйткәндәй, замана «гаврош»тарының 80 процентының атаһы-әсәһе иҫән-һау.

Уҡыусының зиһененә һандарҙы йөк итеп һалыу яғында түгелмен. Статистиканың йәне-йөрәге юҡ. Әммә беҙ кешеләр ҙә баһа! Һәммәбеҙгә атайәсәйебеҙ ғүмер бүләк иткән. Был донъяға күҙен асҡан һәр кем, үҙ йондоҙон ҡабыҙа алмаған хәлдә лә, кеше мәртәбәһе менән йәшәргә хаҡлы. Илебеҙҙә иһә, граждандар һәм Бөйөк Ватан һуғыштарынан байтаҡ ваҡыт үткәс, етемлектең өсөнсө тулҡыны күтәрелде.

Ваҡыт хәҙер үтмәй, ә елә генә. Беҙ, өлкәндәр, баланың фекерләүендәге үҙгәрештәр артынан өлгөрмәйбеҙ, уның хыялдарын, зауығын аңламайбыҙ. Ярәтһаҡ та, бала беҙҙән алыҫлаша бара, ул беҙгә билдәле булмаған донъяға инеп көпләнә. Уның йәш кенә йөрәгендә нимәләр яфалай, күңелендә ниҙәр ҡайнай, ул нимә уйлай һәм нимә тураһында хыяллана? Ошо ситләшеү осорон фаталь эҙемтәләрһеҙ үткәреп ебәреү әмәлдәрен ҡайҙан табайыҡ? Бала йыш ҡына компьютер менән күҙгә-күҙ ҡала. Телевизор ҙа иман өләшеп тормай. Бала психикаһына йоғонто яһаусы факторҙар самаһыҙ күбәйеп китте. Агрессив телевидение, туҡтамаҫ һуғыш һәм ҡан менән тулы сериалдар, әшәке матбуғат, урам мөхите — балаларыбыҙ ҡурҡыныс хакимлыҡ иткән зонаға килеп юлыҡты. Өҫтәүенә, әгәр ата-әсәһе эсһә, тартһа, эшһеҙ ҙә йөрөһә, баланың бәләһе күп тапҡырға арта. Уларҙы хаяһыҙ, енәйәти мөхит ҡосағына бирмәйексе, эргәләрендә булайыҡ, өлкәндәр был донъяла үҙҙәре өсөн түгел, бәлки балалары һәм ейәндәренең тормошо менән йәшәй. Ауыр, яуаплы бурыс был, ләкин ошо яуаплылығы менән тәбиғи ҙә.

Бер тупһаларҙы тапап, көн дә тиерлек осрашып, уңайы сыҡҡанда һөйләшеп ултырған мәлдәрҙә Мостай ағай миңә, бәғзе мәсьәләлә мауығыбыраҡ китеү ғәҙәтемде күреп, «философ» тигән ҡушамат taҡҡайны. Оло менән бәхәскә инеү ғәҙәте булмағас, үҙ холҡоңа әйләнеп ҡарауҙан бүтән сара юҡ. Үҙегеҙ ҙә һиҙгәнһегеҙҙер, тормош килде-киттерәк була барған һайын, кешеләр, бигерәк тә өлкәнәйгәндәр, йыш ҡына иге-сиге күренмәҫ оҙон тәбәрәккә төшөп китә. Был күңелде йыуатыр әмәл эҙләүме икән, әллә тормоштоң юғала барыусы асылын тотоп алып ҡалырға маташыумы? Һәр хәлдә, донъяның башты әйләндерерлек, мейене ҡайнатып киптерерлек ғәләмәттәре һиңмайҙы — даһи аҡыллы, зирәкте һиңрәү кеше итерлек шул. Заманына тура килгәс, ихтыярһыҙҙан, әүлиә сүрәтенә лә, диуана рәүешенә лә инерһең.

Икенсе донъя һуғышында заруратдан арҡаҙаштар булып, уртаҡ дошманды кәмһетмәй генә солохҡа өлгәштек тигәндә, союздаштар, күп йылдар йәшереп йөрөткән хөсөт ниәттәренә ирек ҡуйып, кисәге яуҙаштарына ҡаршы йәнә бер фронт — «һалҡын һуғыш» фронтын — асып ебәрҙе. Атышһыҙ, әлегә үлемһеҙ яуҙың ҡубыуында беҙ, ғәҙәтләнгәнсә, яуыз ниәтле, ҡәһәр һуҡҡыр американдар менән уларҙың тоғро ҡойроҡтары британдарҙы ғәйепләнек. Цезарҙың йәмәғәтенә шик төшмәй, тигән һымаҡ, үҙебеҙгә лә гонаһ табы ҡунаһы булманы. Халыҡ шағиры Мәжит ағай Ғафури: «Бөтөр шунда көндәге хөсөт һәм дошманлыҡ, тыуыр донъяға дуҫлыҡтар», — тип өмөтләндереп тә ебәрҙе.

Донъя барышын рентген нурынан да үтәрәк күреүгә һәләтле шағир ҙа ошолай ышаныста булғас, тиҫтәләрсә миллион әруахтар ҡәбере өҫтөндә тапанырға теләүселәр бынан һуң табылыр тип уйларға мөмкин инеме һуң? Икенсе донъя һуғышы тамамланғас, әллә һиллеккә үә әпәкәйгә моҡрау үҙәккә үтепме, байтаҡ ваҡыт: «Тирә-яғың яу булһа ла, өйөң эсе һау булһын», — тигән уйҙы иман итеп

йәшәнек. Хәйер, нимә үҙгәрҙе һуң? Беҙҙең халыҡта, ул башҡортмо, русмы, татармы, йә ул ғүмер баҡый эргәлә ғүмер кисереүсе бүтән ҡәүем кешеһеме, ғәжәпләнерлек бер ҡатлылыҡ менән ғафиллыҡ, ғәҙәт булыуҙан үтеп, тәбиғи булмыш рәүешен алған. Телевидение, гәзиттәр көнө, сәғәте һайын яуҙырып торған ҡәбәхәтлек, бурлыҡ, әшәкелек, йыртҡыслыҡ хәбәрҙәрен тыңлайбыҙ, уҡыйбыҙ ҙа, баҫып барыусы ошо афәткә ҡаршы яуап хәрәкәте урынына, Ғәйнан Хәйригә эйәреп, «Нишләп улай ғазазилдар ҡанлы хәнйәр ҡайрайҙар? Нишләп улай ҡан ҡойорға яуызлыҡтар эҙләйҙәр?» — тип риторик нәфрәтләнеү-зарланыу менән сикләнәбеҙ. Мәғлүмдер, бер генә көс тә, айырыуса яуыз көс, ғәҙеллек, намыҫ, оялыу һымаҡ абстракт төшөнсәләргә иғтибар итмәй, хатта уны һанламай ҙа. Хәҙер Ҡарл Маркс, Владимир Лениндарҙың ғилми хеҙмәттәре генә түгел, бәлки исемдәре үк бәғзе әҙәмдәрҙең күҙенә ҡан һауҙырып, телдәренән ағыу һиптерһә лә, йә кеше булып йәшәйбеҙ, йә аяҡ аҫтында селәүсен хәлендә борғоланабыҙ тигәндәй юл сатында торғанда Маркстың «Гегелдең хоҡуҡи фәлсәфиәтен тәнҡитләүгә ҡарата инеш һүҙ»ендә әйтелгән фекерҙең хаҡ булыуына йәнә ышанаһың. «Тәнҡит ҡоралы һис ҡасан да ҡорал менән тәнҡитләүҙе алмаштыра алмай. Матди көс фәҡәт матди көс менән генә түңкәрелергә тейеш», — тип тәкрарлаған ҡапма-ҡаршы көстәрҙең теләһә ҡайһы мәлдә бәрелешеү ихтималын XIX быуатта уҡ шәйләй алған фекер эйәһе. Һәм был ҡораллы низағҡа саҡырыу түгел, бәлки тарих ағышының теләһә ҡайһы ваҡыт конфронтацион төҫ алыу мөмкинлеген иҫкәртеү генә. Әммә классик әйтеп ҡалдырған фекер XX быуатта ла, хәҙер ҙә актуаллеген һис һүрелтмәй, киреһенсә, блоктар яңырған, дәүләттәр араһында бер-береһенә дәғүәләр көсәйгән ваҡытта сәйәси йүнәлеш төҫөн ала.

Рәсәй кешеләре һиллек йылдарында ла үҙен яу уртаһындағылай тойоп йәшәй. Һәм ни өсөн ошо ғәҙәти булмаған шарттарҙа көн күреүе тураһында уйланмай ҙа, хатта уны һиҙмәй ҙә шикелле. Беҙ тамсы һыу күрмәгән сүллектә йәшәгән мәхлүҡтәрҙең ни менән туҡланыуына, эҫегә-һалҡынға нисек сыҙауына хайран ҡалабыҙ. Мөхитендә һанһыҙ хазиналар һаҡлаусы Евразия киңлектәрен төйәкләгән ҡәүемдәргә һис ҡасан да рәхәт булмаған. Унда диңгеҙҙәр яңы ғына һауып алынған һөт һымаҡ йылы түгел, иртән ҡаҙалған таяҡ кискә тамыр ебәрерлек йомарт тупрағы ла юҡ. Хәҙер Рәсәй биләп ятҡан сикһеҙ, ҡырыҫ ерҙәрҙә йәшәүҙең һәр көнө донъяны ҡабаттан асыу, тереклек өсөн йән әсеһенә көрәш менән бәрәбәр. Көрәштең, ауырлыҡтарҙы еңергә ынтылыуҙың, әлбиттә, тәнде лә, рухты ла нығытыуы мәғлүм. Шул уҡ ваҡытта тотош йәмғиәт тә, айырым шәхес тә ғүмер баҡый көсөргәнеш хәлендә йәшәй алмай. Боронғо яугирҙар алыш юҡ саҡта ян керешен дә ысҡындырып ҡуйған. Әгәр Рәсәйгә ҡараған биләмәләр тарихы сәхифәләренә күҙ йүгертеп үтһәк, ошонда ойошҡан дәүләттең ғүмер баҡый яу көткәнен һәм яу хәлендә йәшәгәнлеген күрербеҙ. Был нимә һуң, ҡарғышмы, әллә яҙмышмы? Бүтән ҡәүемдәр, башҡа илдәр ҙә кемдеңдер баҫҡынсылығын кире ҡаҡҡан, үҙе лә ҡайһы берәүҙәрҙең ер-һыуына, мал-мөлкәтенә ымһынған, ирекленең хөрриәте икенселәрҙе тарһындырған. Ошоларҙы күрә йөрөй, халыҡтың үткер зиһенле кешеһе: «Хан күп булһа — ҡан күп, бей күп булһа — яу күп, түрә күп булһа — дау күп», — тип эс бошорғос һығымтаға килгән.

Рәсәйҙә йәшәүсе һәммә ҡәүемдәрҙе, дөйөмләштереп, рус кешеһе тип кенә атағанда, уның холоҡ-фиғелендәге ғәжәйеп үҙенсәлектәргә иғтибар

итмәй мөмкин түгел. Ул ваҡыт һәм урын бар иткән ҡиммәттәргә битараф хәлдә йәшәй. Уның өсөн хис-тойғолар, дөрөҫөрәге, шул хистәрҙе белдереү мөһимерәк, сөнки әлеге мәлдә кисергәндәре маҡсатына барып етмәй ҡала, уларҙы яңылары баҫып китә. Рус кешеһе билдәле бер нәмәлә туҡтала белмәй, шуға күрә ғүмер баҡый үрһәләнеп, йә бер, йә икенсе тоҙаҡҡа эләгеп йәшәй. «Нисауа!» йәки «Бөгөнгөнөң иртәгәһе бар, иртәгәнең ирмәге бар» тип үҙ-үҙебеҙҙе бәүетеүҙәр рустың ғына түгел, бөтөнөбөҙҙөң дә менталь үҙенсәлеген күрһәтә лә инде.

Уҙған быуат баштарында, инҡилап алдынан Рәсәй дәүләтендә Франция Республикаһының илсеһе булып эшләгән Морис Палеолог 1916 йылдың 20 февралендә көндәлегенә ошондай һүҙҙәрҙе яҙған: «Рус кешеләре фәҡәт тәьҫораттар һәм хәҙерге мәл тураһындағы уй менән йәшәй. Йә иһә Рәсәйҙә бизмән тәрилкәләре бәүелеп тормай, бәлки, ҡапыл ғына өҫкәме, аҫҡамы һикерә. Бер юлы бөтөнөһө лә — образдар, ниәттәр, хистәр, идеялар, ышаныуҙар, тотош бина ҡыйрала. Рустарҙың күпселеге өсөн декорацияларҙың һәр даим үҙгәреп тороуы — иң оло бәхет».

Рәсәйҙең төп халҡына һәм уның дәүләтселегенә ҡарата дуҫлыҡ тойғолары йөрөтмәгән аҡыллы дипломаттың әлеге һүҙҙәрен теркәүенә йөҙ йыл. Ошонан бирле, быуат эсендә, илебеҙҙә сәйәси декорацияларҙың әленән-әле алмашынып тороуын иҫәпләмәгәндә, нимәләр үҙгәрҙе һуң? Беҙ урта быуаттарҙан һуҙыла килгән асылыбыҙҙан һаман да ҡотола алмағанбыҙмы? Донъяның күпселек дәүләттәре һуғыштар, колониаль иҙеүҙәр, ҡоллоҡ, инҡилаптар, ас-яланғаслыҡ, эпидемиялар һәм бүтән бәлә-ҡазалар кисерә лә, үҙ мөхитендә көс табып йә ситтән ярҙам алып, ҡалҡынып китә, хатта йәшәрә, яңы ҡеүәткә эйә була. Урмандағы ҡартайып йығылған ағас серегәндә уның олононан үҫентеләр төртөп сыға, үрләй — урмандың яңырыуы, мәңгелеге шунда күренә. Ошо логикаға эйәргәндә, Рәсәйҙең организмы яңы үҫентеләр тыуҙырырлыҡ һәләтен юғалтҡанмы икән ни? Илебеҙ дәү, үҙ кәүҙәһен ҡуҙғата алмаҫтай имгәкләнгән айыу хәлендә. Ул инде өңөндә генә ята, Мостай ағайҙың һүҙҙәрен ныҡ ҡына үҙгәртеп әйткәндә, тышҡа сыҡһа, өрә-өрә эттәр ҡамай, баш осонда, ҡоҙғон булып, әжәл янай.

Уҫал мөхиттә көстө генә һанлайҙар. Рәсәй Федерацияһы әле булһа ҡеүәтле, хатта бөйөк дәүләт статусына дәғүә итә. Ләкин быны өсөн ракеталар, һыу аҫты крейсерҙары ғына етәме икән? Иҡтисад, халыҡтың көнитмеше, фән, мәғариф, һаулыҡ һаҡлау ни хәлдә? Бихисап форумдар, кәңәшмәләр, телмәрҙәр, интервьюлар заводтарҙы терелтәме, ауылдарға йән өрәме, халыҡта дәрт уятамы? Әгәр илһөйәрлек телевизорҙан көн һайын ҡорал, маневрҙар күрһәтеүгә генә ҡайтып ҡалһа, уның милитаризм тип аталыуы хаҡлыраҡ.

Рәсәй Федерацияһының бөгөнгө халыҡ-ара хәленә йәнә әйләнеп ҡайтып, тарихтан бер миҫалға мөрәжәғәт итәйек. 1856 йылда Ҡырым һуғышында еңелеп, Рәсәйҙе кәмһеткән һәм уны Ҡара диңгеҙҙәге флотынан яҙҙырған Париж солохонан һуң сит ил эштәре министры, йәғни ул саҡта канцлер итеп тәғәйенләнгән кенәз Александр Михайлович Горчаков көнсөл арҡаҙаштарға: «Рәсәй уфтанып йәш түкмәй, Рәсәй йыйнаҡлана ғына», — тип белдергән. Бөйөк рус дипломатының тәрән мәғәнәле һүҙҙәре дошмандарға ла, ил хакимдарына ла, иң мөһиме — өмөтөн өҙмәгән халыҡҡа ла төбәлгән. Бөйөклөк, ысындан да, бейектә булыуҙа түгел, бәлки яҡты, алыҫ ҡарашлы аҡылдалыр.

Теләһә ниндәй шарттарҙан да башын иҫән-һау алып сыға алған кешене халыҡ: «Утта ла янмаҫ, һыуҙа ла батмаҫ», — тип баһалар булған. Ысындан да, был донъяла үҙенде хужа тойоп йәшәр, аяҡ терәп һөйләшер өсөн, тәбиғәт тарафынан бирелгән һәләтлектәрҙән тыш, һүҙ менән ҡапыл ғына һүрәтләү мөмкин булмаған сифаттар ҙа кәрәктер. Ваҡыт үткән, тормош үҙгәргән һайын улар ҙа яңы шарттарға яраҡлаша һәм был процесс һис ҡасан да туҡтау белмәй. Боронғо замандарҙа мал-тыуар түгел, ус аяһындай сепрәкте, һыныҡ икмәкте күрһәтмәй кеҫәгә һалған өсөн кеше тирә-яҡтағыларҙың ихтирамын юғалткан. Ауыл ерендә, мәҫәлән, халыҡ телендәгесә «оғро» тигән исеме сыҡҡан кеше менән аралашмағандар, ул гүр эйәһе була ҡалһа, дөйөм зыяратта ерләтмәгәндәр. Уғрылыҡтың әхлаҡи сығанаҡтарын асыусы әйтемдәр, ҡарһүҙҙәр бар. «Бурлыҡ ир балала сыбыртҡынан, ҡыҙ балала энәнән башлана», — тигәндәр. Америка яҙыусыһы һәм журналисы Эдгар Хоу иһә: «Бур һәр кем дә урлаша тигән ышаныс менән йәшәй», — тип раҫлай. Ә бөйөк гуманист-ғалим Фрэнсис Бэкон: «Әгәр яйы сығып тормаһа, бур ҙа булмаҫ ине», — тигән фекерҙә. Ана шул «яйы сыҡмаһа» тип әйтеү әхлаҡи, социаль, хатта сәйәси һығымталарға килтерә. Бер кем дә, юғарыла әйткәнсә, уғрылыҡ сифаттары менән тыумай. Һәр хәлдә, башҡорт халҡында ғәҙел, хеҙмәт аша килгән мөлкәттең генә хәләл икәнлеге бәхәс тыуҙырмаҫ хәҡиҡәт булып ҡала. Ҡендек инәһе, мәҫәлән, бала донъяға килгәнсе үк ошолай һамаҡлаған:

Атаң тирләп мал табыр,<br>
Тере иткәнен ҡоро итмәҫ.<br>
Әсәң балдан ҡот табыр,<br>
Ҡиҙәгәйеңде ҡоротмаҫ.

Ҡиҙәгәй был осраҡта «яңағыңды, тешеңде» мәғәнәһендә йөрөй инде. Иң мөһиме — әҙәм балаһы ғәҙеллек, эскерһеҙ маҡсат, хәйләһеҙ хеҙмәт аша ғына үҙенең мәртәбәһен һаҡлап ҡала ала. Мутлыҡҡа, хәйләгә, алдыҡҡа йәки наянлыҡҡа ҡоролған ғәмәлдең осо, бер килеп, барыбер сыға ул.

Халыҡ күңеленең сафлығына хайран ҡалаһың да, кешеләрҙең ҡасандыр намыҫлы йәшәүенә хәҙер көнләшәһең. Ғәм араһында өҫтөнлөклө урында булыу теләге, хакимлыҡ, мөлкәткә ынтылыу, күптәрҙең тәбиғи төпкөл сифаттарын аҡрынлап үҙгәртә барып, менталь үҙенсәлеккә, булмышҡа әүерелгән. Мостай ағай был донъяға «хәйләгә ҡоролған карусель», тип иҫле генә баһа бирһә лә, алдыҡ сөгөрмәгенә ҡотолғоһоҙ бата барыуыбыҙҙы инҡар итеп булмай.

Коррупция, откат, рэкет, бүтәндәр милкен рейдерҙарса баҫып алыу, килемде, үҙ дәүләтеңә законлы түләргә тейешле һалымдан ҡасырып, офф-шор тип аталған урынға күсереү һ. б. — быларҙың һәммәһе лә баҙар мөхитендә хасил булған күренештәр. Уларҙың барыһына ла иҡтисадсылар, финансистар аңлатма бирә, хатта ошо күренештәрҙең баҙар мөнәсәбәттәрендә ҡотолғоһоҙ икәнлеген нигеҙләп тә ҡуя. Мәҫәлән, офф-шор (инглизсә off-shore — ярҙан бер ни ҡәҙәр алыҫлыҡта, ил биләмәһенән ситтә) — сит илдәр ҡатнашлығында һәм сит ил валюталары менән финанс-кредит операциялары ваҡытында ташламалы режим (һалымды кәметеү, валюта контроленән азат итеү һ. б.) булдырылған урын. Хәйер, был ябай ғына эштең асылына төшөнөү өсөн иҡтисадсы һәм финансист булыу ҙа кәрәкмәй, сөнки ошо мөхиттә килеп сыҡҡан терминдар хәҙер көндәлек

тормошобоҙҙа ныҡлап урын алды. Ҡапиталды әлеге офф-шорҙарға күсереү, әлбиттә, теләһә ҡайһы дәүләттең дә зитына тейеүсе күренештер һәм Финанс министрлығы ла, финмониторинг тип аталған ойошма ла, Милли банк та аҡсаны асыҡтан-асыҡ ҡасырып алып китеү менән йоғонтоло көрәш сараларын әлегә таба алмай. Ил етәкселәренең «деоффшоризация» тип нисәмә йылдар йәүкәләүе ҡоро хәбәр генә булып ҡалды, ахыры.

Ватандаштарыбыҙҙа, байтаҡ ваҡыттан алып, сәйер бер ғәҙәт тамырланды. Ул да булһа, сит-ят телдәрҙән, башлыса инглизсәнән ингән терминдар менән мауығыу. Рейдерлыҡ, рэкет, коррупция — башҡорт телендә уны аныҡ ҡына алмаштырырлыҡ һүҙ таба ла алмаҫһығыҙ. Был сүп-сар төшөнсәләр — ҡәһәр һуҡҡыр замандың яман күренештәре.

Поляк әҙибе Антоний Регульский коррупцияны «бысраҡ ҡулдар сире» тип атаған була. Моғайын, ул «коррупция» тигән иҡтисади-ижтимағи төшөнсәгә, ябайлаштырып, ришүәтселекте һалғандыр. Мәғлүм булыуынса, ришүәт — шәхестәр араһында ғына шаһиттарһыҙ була торған ғәмәл. Коррупция иһә — вазифалы шәхестең үҙенең хеҙмәт урынын байығыу өсөн файҙаланыуы. Был сир, әйткәндәй, күп илдәрҙе солғап алған һәм ғәйәт ҡурҡыныс социаль күренеш тип һанала.

Беҙҙең дәүләттәге килде-киттеле статистикаға ышанған хәлдә, уҙған йыл илдәге 800-ҙән ашыуыраҡ чиновник, төрлө кимәлдәге депутат, хоҡуҡ һаҡлау органдары хеҙмәткәре коррупция менән бәйле енәйәт яуаплылығына тарттырылған, имеш. Йәмәғәт фекерен өйрәнеү буйынса бөтөн Рәсәй үҙәге (ВЦИОМ) мәғлүмәттәре буйынса «Дәүләт Думаһы депутаты» тигән һүҙбәйләнеш рәсәйҙәрҙә башкөллө ыңғай булмаған тәьҫораттар уята икән. Йәнәһе, депутатты хәтерләгәндә, һорау бирелгән кешеләрҙең 20 проценты уларҙы «ришүәтсе», 60 проценты — «үҙен генә ҡайғыртыусы», 57 проценты — «халыҡтан айырылған», 53 проценты — «намыҫһыҙ», 45 проценты — «принципһыҙ», 42 проценты «яуапһыҙ» тип иҫәпләй. Билдәлелер, тәнҡиткә эләкмәйем тиһәң, ҡыл да ҡыймылдатмауың хәйерле. Ә депутаттарҙың эшмәкәрлеге тотош халыҡтың күҙ алдында ғына түгел, бәлки, бүтән ойошмаларҙан айырмалы рәүештә, уларҙы микроскоп аша күҙәтеп торалар.

Коррупцияға әйләнеп ҡайтҡанда, ул тормошобоҙға шул ҡәҙәре лә һеңешкән, хан замандарынан әлеге сир менән йәшәгәнгә, уның барлығын һиҙмәйбеҙ ҙә кеүек. Тарихсылар әйтеүенсә, X быуатҡа тиклем бүләк тотороу осраҡлы, рәхмәт белдереү рәүешендә генә булған. Византиянан өлгө алып, Рус дәүләтендә аҫырау (кормление) институты барлыҡҡа килгәс, һәммә нәмә үҙгәргән. Кенәздәр үҙ ҡулы аҫтындағы ҡалаларға воеводаларын ебәрә башлаған һәм ундағы халыҡ воеводаларҙы, кейем-һалым, ашау-эсеүҙән башлап, бөтөн нәмә менән тәьмин итергә тейеш булған. Үҙ мәнфәғәтен уйлаған кеше һыҡмырланмаған, әлбиттә. Йомошоңдо йомошлайым тиһәң, бүләгеңде йәлләмә. Аҫырау XVI быуатта ғына ғәмәлдән сыға. Ләкин «ҡараҡ — урлап, түрә алдап ашай» тигәндәй, яман ғәҙәт тамырланып өлгөрә шул. Үҙең тирәләгеләр иҫәбенә типтереп йәшәү традицияһы тормош ҡағиҙәһенә әүерелә. «Йәйәүленең ризығын һыбайлы ашаған», тигән һүҙҙең мәғәнәһе шунда асыла инде. Чиновниктар, тора-бара, батша ҡаҙнаһына ла барып етә. Шулай, коррупция үҙенә күрә яман ҡурҡынıслы сиргә әйләнә. Һәм уға йоғонтоло дауа әле булһа табылмаған.

«Тамаҡһау үлеме — тамаҡтан, уғрыныҡы — таяҡтан», — тип, коррупцияны ҡурҡыу, язаның ҡатылығы еңә аласаҡ тигән ҡараш яҡлылар бар. Миҫал итеп бур чиновниктарҙы халыҡ алдында атыусы Ҡытайҙы килтерәләр. Ә һөҙөмтә? Берәүҙәрҙе аталар, икенселәре урлашыуын дауам итә.

Әйткәндәй, ҡаҙна талаусыларҙы Рәсәйҙә лә язаға тарттырғандар. Ришүәт өсөн тәүге яза Иван Грозный ваҡытында уҡ бирелгән. Реформатор-батша Петр I лә уларҙы йәлләп тормаған, Себер губернаторы кенәз Матвей Гагарин менән баш прокурор (!) Алексей Нестеровтың башын киҫтергән. Әммә файҙаһы булмаған. Петрҙың иң яҡын арҡаҙашы Александр Меншиков — үҙе ата коррупционер.

Күптән инде күнегелгән алйоттар һәм юлдарҙан һуң Рәсәйҙә өсөнсө бәлә итеп коррупцияны һанайҙар. Өс бәләне бер епкә теҙгәндә, бәлки, коррупцияны алға ҡуйырға кәрәктер? Әгәр бәғзе чиновниктар мутлашмаһа, юлдар ысындан да һәйбәтерәк булыр ине. Коррупцияға ҡаршы көрәштең мәғәнәһе иң тәүҙә чиновниктар үҙ вазифаһы иҫәбенә кеҫәһен ҡалынайтмаҫлыҡ закондар булдырыуға ҡайтып ҡала. Һәм ҡайһы бер ҡанундар Рәсәйҙә ғәмәлгә ингән дә. Дәүләт хеҙмәткәрҙәренә эшҡыуарлыҡ менән шөғөлләнеү тыйылған. Хеҙмәткә ингәндә чиновник мөлкәтенә декларация тултыра, ошоноң менән уның хеҙмәт хаҡына тура килеүе бер ни ҡәҙәр раҫлана. Коррупцияла тотолған чиновникка Белоруссияла, мәҫәлән, дәүләт хеҙмәтенә юл ябыла, ул дәүләт хеҙмәткәре пенсияһынан ҡолаҡ ҡаға. Хәрби хеҙмәттәге коррупционер ябай һалдат пенсияһына ғына иҫәп тота ала. Әгәр чиновник мөлкәтенең хаҡы уның законлы килеменән 25 процентҡа артһа, ул дәүләт иҫәбенә тартып алына.

Рәсәй Президенты коррупцияға ҡаршы көрәш буйынса милли план проектын быйылғы 15 мартҡа әҙерләп өлгөрөргә ҡушҡайны. Ил башы фарман биргәс, документ өлгөргәндер. Ошо мәсьәлә буйынса ғына һуңғы йылдарҙа әҙерләнгән был нисәнсе проект икән? Алдағылары ниндәй һөҙөмтә биргән? Уларҙың һөҙөмтәлелеген кем баһалаған? Мөрәжәғәтнамәләрендә, төрлө кәңәшмәләрҙә В.Путин коррупция мәсьәләһенә әйләнә лә ҡайта. Урланғанды кире ҡайтарыу — ғәҙеллек менән йәшәүсе һәр кемдең хыялы, ләкин Рәсәй ысынбарлығында закон бөтөн кешегә лә тиң мөнәсәбәттә түгел. Шуға күрә Президенттың уҫал талаптары ла яуынһыҙ-ниһеҙ күкрәп үткән һаҙағай ғына булып ҡалыуы ихтимал. Һүҙ күп, ә шаулы баҙарҙың бурҙы йәшереүе барыбыҙға ла мәғлүм.

Владимир Владимирович, мауығып китепме, дәүләт хеҙмәтенә килеүсе чиновниктарҙы ант иттерергә һәм уны боҙған хәлдә дисциплинар яуаплылыҡҡа тарттырырға тәҡдим индерҙе. Беҙҙәге иң изге ниәттәрҙең дә ғәмәли тормоштан ни тиклем алыҫ булыуын аңлаған кеше әлеге анттың күҙ буяу ғына булып ҡаласағын белеп тора. «Юҡҡа ант итмә — ер йотор», — тип иҫкәртер булған халыҡ әүәл. Ә әйттең, әйткәнеңде имзалап та ҡуйҙың, ул инде һиңә юридик һәм әхлаҡи яуаплылыҡ йөкмәтә.

Мостай ағай «Йылмайыу» исемле поэмаһын: «Вәғәҙәләр. Янау, өгөттәр — ҡомдан ишкән арҡан кеүектәр», — тип тамамлай. Шул ҡом арҡандарға көн ҡалмаһа ярай ҙа...